Башҡортостан Республикаһы

муниципаль район Ауырғазы районының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы Талбазы ауылы Лицейы

# Тема: «Башҡортостан»

Башҡарҙы: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Ғүмәрова Айһылыу Әхәт ҡыҙы

Тема : Башҡортостан

Маҡсат: - уҡыусыларҙы Башҡортостан менән таныштырыу.

- Уҡыусыларзың телмәрен,логик фекерләүен, хәтерен үҫтеререү.
- Туған илен ҡәҙерләүсе, унын киләсәген ҡайғыртыусы аңлы, тәрбиәле , белемле, илен, ерен яҡларҙай шәхестәр тәрбиәләү .

Йыһазландырыу: Башҡортостан картаһы, дәүләт символдары, гимн, фонохрестоматия, һүрәттәр,слайд.

Дәрес барышы

1.Ойоштороу мәле. Һаумыһығыҙ балалар. Ултырығыҙ.

2.Психологик ситуация.

Бер-беребеҙгә ҡарап йылмайҙыҡ. Эстән генә дәрестең уңышлы, файҙалы булыуын теләйек . Ҙур теләк менән эш башлайыҡ. Быйдай сайыҡта нимә тиҙәр әле?

Хәйерле сәғәттә.

Тема һәм маҡсатты билдәләү.

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны яңгырай.(баҫып тыңлау)

- Уҡыусылар, һеҙ ниндәй көй тыңланығыҙ
- Б.Р-ның Дәүләт гимны.
- Ә гимнды кем яҙған  (Фәрит Иҙрисов)
- Б.Р-ның тагы ниндәй символдарын беләһегеҙ Башҡортостан Республикаһының флагы. Ул өс төҫтә.



- Зәңгәр төҫ күк йөҙө кеүек киңлекте, ireклекте аңлата.
- Аҡ  төҫ сафлыҡты, яҡты уйҙарҙы, тыныслыҡты сағылдыра.
- Йәшел төҫ мәңгелек тормошто күрһәтә.

( Ф.Ғөбәйҙуллинаның ( Башҡортостан флагы ) шиғырын һөйләү).

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербы.



Республикабыҙ 1993 йылдың 12 октябрендә Дәүләт гербын ҡабул итте. Унда башҡорт халҡының азатлыҡ көрәшен кәүҙәләндергән Салауат һынлана. Яңы тыуып килгән ҡояш батыр һәйкәлен нурландыра.

Ете тажлы ҡурай - ете ырыуыбыҙ билдәһе. Түбәндә Башҡортостан тип яҙылған. Герб- Башҡортостаныбыҙ тамғаһы ул.

Башҡортостан Республикаһының  Дәүләт гербы- халыҡтың азатлыҡҡа ымтылыуын, уның батырлығын, намыҫлығын һәм бурысына тоғролоғон сағылдыра.

- Ни өсөн беҙ дәресте Башҡортостан Республикаһының символдары менән башлап ебәрҙек?

- Беҙ бөгөн Башҡортостан, тыуған ер, уның киләсәге тураһында һөйләшәбеҙ. "Башҡортостан" тексты менән танышырбыҙ.

2. Дәфтәрҙәргә числоны, теманы яҙыу.

3. Ә хәҙер, уҡыусылар Башҡортостан картаһына күҙ һалайыҡ.




Ер шарының картаһына

Ҡараһаң яҡшы ғына,-

Башҡортостан шул картала

Бер япраҡ саҡлы ғына.

Әйе, япраҡ, аҡ ҡайындың

Бер япрағы ни бары.

Ә ҡайыны- бөйөк Рәсәй-

Шундай йәшел юғары.

Башҡортостан - иркен ил. Уның майҙаны 143 мең 600 квадрат км. тәшкил итә.  Башҡортостан Республикаһы үҙе 54 районға бүленә, 21 ҡала һәм 4674 ауыл бар.  Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы- Өфө. Ул бай тарихлы ҡала. Йылдан-йыл үҙгәрә, матурая.  Башҡортостан халҡы бөтәһе 4 млн. кешенән ашыу.

4. Ә хәҙер уҡыусылар һеҙҙең сығыштарығыҙҙы тыңлайыҡ. Һеҙ Башҡортостан тураһында нимәләр беләһегеҙ?

5. Башҡортостан Һинең гүзәлеккә

Тиң булырлыҡ ерҙәр бармы икән ?

Аҡҡош кеүек ап-аҡ Ағиҙелкәй

Ҡайһы илдә генә бар икән.

Ҙур йылға, тауҙары менән

Таралған һинең даның.

И йәмле, һин и матур һин,

Минең Башҡортостаным.

Шаулап үҫә мәғрур урмандарың,

Туҡ башаҡлы иркен ҡырҙарың,

Данлы илем, гүзәл республикам,

Бүләк булһын һиңә йырҙарым.

6. Ә хәҙер уҡыусылар дәрестәге Башҡортостан текстын иғтибар менән уҡыйыҡ.

- берәй уҡыусының уҡыуы

- һүҙлек эше

- текстан бер хәбәр, бер өндәү һөйләм табып яҙыу.

7. Башҡортостандың иҫтәлекле урындары тураһында һөйләү. ( Салауат Юлаев һәйкәле, Дуҫлыҡ Монументы, Шүлгәнташ мәмерйәһе)

1) С.Юлаев һәйкәле 1967  йылдың 17 ноябрендә асыла. Ул Ағиҙел йылғаһының бейек ярында урынлашҡан. С. Юлаев һәйкәле- илебеҙҙәге иң ҙур атлы скульптура. Унын бейеклеге- 9,8 м, ауырлығы- 40 тонна. Ул бронзалаштырылған суйындан ҡойолған. Һәйкәлдең авторҙары- скульптор. С.Д.Тавасиев һәм архитекторы И.Ғ.Ғәйнетдинов.











2) Дуҫлыҡ Монументы

3). Шүлгәнташ мәмерйәһе

Башҡортостандың гүзәл  тәбиғәтле Бөрйән районында Ағиҙел йылғаhы буйында Шүлгәнташ мәмерйәhе урынлашҡан. Ғалимдар 1959 йылда мәмерйәhенең таш стеналарында яҙыуҙар, hүрәттәр тапҡандар. Һүрәттәр бынан яҡынса 14 мең йыл элек эшләнгән икән. Бөгөн был мәмерйәне бөтә донъя ғалимдары өйрәнә. Килеүселәргә экскурсиялар ойоштоРола.

8.Башҡортостандың күренекле шәхестәре.

1) Башҡортостандың беренсе президенты Мортаза Гөбәйҙулла улы Рәхимов әнә шундай шәхестәрҙең береhе. Ул сығышы менән Күгәрсен районы Теүәкән ауылында тыуған.Башҡортостандың именлеге,үҙаллығы өсөн ул көнөн-төнөн эшләй. Республикабыҙ hуңғы йылдарҙа hәр яҡлап Рәсәйҙә алдынғы урынға сыҡты. Мортаза Ғөбәйҙулла улы олоhонан алып кесеhенә тиклем ҙур хәстәрлек күрә. Шуға ла  бөтөн халыҡ уны ярата hәм уға ышана



2) Юлбашсыбыҙ Зәки Вәлиди. Ул Ишембай  районының Көҙән ауылында тыуған. Бик ҙур ғалим. Унның 400-ләп хеҙмәте бар. Ул Башҡортостан дәүләтен ойоштороусы була, башкорттарҙың үҙаллылыҡ өсөн көрәшенә етәкселек итә.



3) Шағир Мостай Кәрим- әҙәби ижадтың бөтә өлкәләрендә лә актив эшләгән күп яҡлы талант эйәһе. Унның йөҙгә яҡын китабы донья күрә. Унның тыуған ил алдындағы, халыҡтар менән дуҫлыҡты үҫтереүҙәге хеҙмәте юғары баһалана. М.Кәрим Башҡортостандың халыҡ шағире исеменә, күп тапҡыр Дәүләт премиялары һәм Халыҡ-ара почетлы дипломдарға лайыҡ булды.



4) Башҡортостан Республикаһы тураһында алған белемдәрен тикшереү, баһалау. Викторинаға яуап биреү.

Тыуған илебеҙҙең киләсәге, яҙмышы- беҙҙең ҡулыбыҙҙа. Тыуған Уралыбыҙҙың мөғжизәле тәбиғәтен, бөтмәҫ- төкәнмәҫ байлығын һаҡлап ҡалайыҡ, дуҫтар!

5) Өй эше. Тыуған ил, Ватан тураһында мәҡәлдәр яҙарға.

-Ватанһыҙ кеше- урманһыҙ һандуғас.

-Тыуған ил алтын бишек.

-Тыуған ил берәү генә.